*Римат КАШАПОВ,*
*журналист*

# КАПИТАЛДЫҢ МИЛЛӘТЕ ЮҠ

Ун йыл элек, Гайдар «баҙар ҡапҡаһы»н асҡан ваҡыттағы бер ҡатлылыҡ, нигеҙһеҙ ҡыуаныу беҙгә ҡиммәткә төштө: ишелеп сит ил инвестициялары килер тип көткән инек, киреһенсә килеп сыҡты — капитал илде ташлап ҡаса башланы. Белгестәр раҫлауынса, 1991 йылдан иҫәпләһәк, Рәсәйҙән яҡынса 350 миллиард долларлыҡ байлыҡ сығарылған, былтыр ғына илде 20 миллиард доллар «ташлап киткән». Сәбәбе бик ябай: капиталдың милләте лә, ватаны ла юҡ, ул тыумышы менән «манҡорт» һәм уны ер йөҙөндә бер генә нәмә ҡыҙыҡһындыра, ул да булһа — табыш. Ҡайҙа күберәк табыш алып була, ҡайҙа бының өсөн уңайлы шарттар булдырылған — ул шунда йүнәлә.

Бөгөн ҡайһы илдә сит ил инвесторҙары өсөн иң уңай шарттар тыуҙырылған? Эксперттар билдәләүенсә, был йәһәттән Италия беренсе урында тора. Унда инвесторҙарға ҙур күләмдә ташламалар һәм 10 йыл дауамында һалым «каникулдары» ҡаралған. Һөҙөмтәлә, әйтәйек, Италия иҡтисадына инвестор 100 миллион доллар һалһа, проекты табыш килтергән саҡта ул ташламалар рәүешендә генә лә 210 миллион долларын янында ҡалдыра, йәғни ташламалар күләме 210 процент булып сыға. Был күрһәткес буйынса Италиянан ҡала Сөғүд Ғәрәбстаны (130%), Польша (100%), Ҡаҙағстан (65%), Ҡытай (60%) һәм Англия килә, ә Рәсәйҙә ул ни бары 25 процент тәшкил итә. Беҙҙә ул әҙер продукцияға таможня ташламалары, региональ һәм урындағы ташламалар сифатында сығылыш таба.

1998 йылғы август финанс һәләкәтенән һуң Рәсәйҙең фонд баҙары дәүләт ҡиммәтле ҡағыҙҙар баҙарының шаҡтай ҙур сегменты юғалыу, средстволарының ситкә ағыуы һәм Рәсәй эмитенттары акцияларының котировкалары төшөүе менән бәйле етди ҡыйынлыҡтар кисерҙе. Һөҙөмтәлә Рәсәйҙең рейтингы 71-се урындан 129-сы урынға төштө.

Шулай ҙа Рәсәйгә сит ил инвестициялары килеүе дауам итә. 1998 йылда уларҙың дөйөм күләме 11,8, ә инде 1999 йылда 9,5 миллиард доллар тәшкил итте. Былтыр иһә 10 миллиард долларҙан артып китте. Әммә иң ғәжәбе шунда: Рәсәйгә инвестициялар һалыу буйынса лидерҙар булған АҠШ, Германия, Англия, Франция компаниялары (уларға инвестицияларҙың 50 проценты тирәһе тура килә ине) сигенә, ә Голландия, Кипр, Гибралтар, Антиль утрауҙары кеүек «экзотик» төбәктәрҙәге фирмалар үҙ позицияларын нығыта.

Эксперттар фекеренсә, әлеге «экзотик» төбәктәрҙәге уңайлы оффшор зоналарҙан ингән капитал 90-сы йылдар башында һәм һуңыраҡ Рәсәйҙән сығып киткән «ҡасҡалаҡ кейәү» булырға тейеш. Уның кире ҡайтыу сәбәптәре икәү: беренсенән, инвестицияларға артыҡ мохтажлыҡ кисермәгән цивилизациялы Көнбайыш иҡтисады был шикле, өҫтәүенә көндәш капиталды үҙенә индермәгән; икенсенән, «ҡасҡалаҡ капитал» хужалары, Рәсәй иҡтисадындағы уңай үҙгәрештәрҙе, ташлап киткән ватандарында үҙ средстволарын отошлораҡ файҙаланыу мөмкинлектәре тыуыуын күреп, өйгә ашығалар.

Әммә һуңғы ваҡытта ингән капитал хәрәкәтендә бер хикмәтле күренеш



09-2001.p65 48 28.08.01, 10:55
Black

асылды: яғыулыҡ-энергетика комплексына һәм металлургияға инвестициялар йәлеп итеү һүрелә бара. Аңлашылыуынса, был табышлы тармаҡтарға инвестициялар бик кәрәк, ғөмүмән, ҡайһы бер Рәсәй белгестәре күҙаллауынса, яҡындағы 2-3 йылда төп фондтар киҫкен яңыртылмаһа, ил иҡтисадында һәләкәтле хәл килеп тыуыуы ихтимал. (Республика сәнәғәтендә, мәҫәлән, төп фондтарҙың иҫкереү дәрәжәһе бөгөнгө көнгә ғәмәлдәге нормативтар буйынса 62,8 процентҡа етте). Ә төп фондтарҙың иҫкеләрен яңыға алыштырыу өсөн ошо маҡсатта тулай региональ продукттың йыл һайын кәм тигәндә 20-22 процентын, йәки яҡынса 35 миллиард һумлыҡ инвестициялар йәлеп итергә кәрәк. Беҙҙә иһә был күрһәткес 8-9 (шул иҫәптән сәнәғәттә — 5) проценттан артмай. Шулай итеп, беҙҙең алда сәнәғәткә, ғөмүмән, иҡтисадҡа йәлеп ителгән инвестициялар күләмен күп тапҡырҙар арттырыу бурысы тора.

Әйтергә кәрәк, был эш ауыр бара, һәм төп бәлә бөгөнгө Рәсәй закондарының сит ил инвесторҙарына 100 процентлы хәүефһеҙлек гарантияһы бирмәүендә һәм, әйтеп үтелеүенсә, башҡа илдәрҙәге кеүек уңай шарттар булдырмауында. Ни өсөн шулай? Күреүебеҙсә, табышлы тармаҡтарға ла инвестициялар бик кәрәк, әммә уларҙың төп позициялары хәҙер инде тулыһынса тиерлек көслө олигархик кландар ҡулында. Был яңы хужаларға көндәштәр кәрәкмәй. Сөнки инвестор, һаҡлыҡ банкы вкладсыһынан айырмалы буларак, һалған аҡсаһына контроллек итеү хоҡуғын талап итәсәк.

Бына шуға күрә лә Рәсәй президенты, хөкүмәте һәм парламентының илгә инвестициялар ағымын көсәйтеү өсөн ғәҙел хоҡуҡи нигеҙ булдырырға тырышыуҙары һаман да ҡағыҙҙа ғына ҡала бирә. Ул ынтылыштар барыһы ла бөгөнгө Рәсәйҙәге берҙән-бер реаль власть — бюрократия һәм уның менән берләшкән олигархтар стенаһына бәрелеп селпәрәмә килә...

Бына ошондай хәлдә Рәсәй төбәктәре нәмә эшләргә тейеш ине һуң? Әлбиттә, айыҡ аҡыл менән, төбәк иҡтисады, төбәк хужалығы ихтыяждарынан сығып, инвесторҙарға ҡаршы аҙым яһарға, төбәктең инвестициялар йәлеп итеүсәнлеген арттырыу маҡсатында һалынған аҡсаның хәүефһеҙлеген гарантияларға сит ил инвесторҙарына өҫтәмә ташламалар яһарға. Башҡортостан Президенты М.Ғ.Рәхимов башланғысы менән 1997 йылда донъя күргән «Башҡортостан Республикаһында сит ил инвестиция эшмәкәрлеге тураһында» Законда нәҡ бына ошо төп положениелар сағылыш тапҡан да инде. Ул, мәҫәлән, ҡыҙыҡһыныусыларға республика территорияһында үҙ инвестицияларын тура һәм портфель инвестициялары, кредиттар формаһында һалырға, һалымдар буйынса ташламаларға таянып, эшҡыуарлыҡтың теләһә ниндәй төрө менән шөғөлләнергә мөмкинлек бирә. Ошо закон нигеҙендә инвесторҙар ике йылдан биш йылға ҡәҙәр республика бюджетына табышҡа һалымдан, эшмәкәрлектең тәүге өс йылында милеккә һалымдан азат ителә.

Ошо һәм башҡа закондар менән нығытылған хоҡуҡи ерлек һәм республика етәкселегенең инвесторҙар менән эшлекле һәм намыҫлы эш итеүе һөҙөмтәһендә, Рәсәй хөкүмәтенең федераль гарантиялар бирергә ашығып бармауына ла ҡарамаҫтан, йыл башына республика иҡтисадына һалынған сит ил инвестицияларының тупланған күләме, ҡапланғандарын иҫәпләмәгәндә, 323,7 миллион доллар тәшкил итте.

Рәсәйҙең иң популяр иҡтисади баҫмаларының береһе — «Эксперт» журналы — 1996 йылдан башлап ил төбәктәренең рейтингтарын асыҡлай. Тәүге белешмәлә үк Башҡортостан инвестиция шарттары һәм ҡеүәте буйынса ил төбәктәре араһында 14-се урынды алды. Урал иҡтисади районында ул, Свердловск һәм Пермь өлкәләренән ҡала, 3-сө урында. Ә инде 1999—2000 йылдарҙа республикаға инвестиция ҡеүәте буйынса 11-се (уға тиклем 13-сө ине), хәүефһеҙлек буйынса 8-се урын (уға тиклем 24-се ине) бирелә. Инвестицион ҡеүәтенә йоғонто яһаусы барлыҡ факторҙар буйынса ла тиерлек Башҡортостан Рәсәйҙә алдынғы урындарҙы алып тора. Етештереү һәм ҡулланыу потенциалы буйынса республика ил төбәктәренең беренсе тиҫтәһенә керә, ә финанс һәм инновацион күрһәткестәре буйынса 11-се урынды биләй. Был йәһәттән тағы ла шуны билдәләп үтеү мөһим: 1999 йылда сит ил инвестициялары күләме шаҡтай кәмеүгә ҡарамаҫтан, республиканың уларҙы йәлеп итеү ҡеүәте һаҡланды һәм ул эксперттар тарафынан инвестицияланып етмәгән төбәк булараҡ баһаланды.



09-2001.p65 49 28.08.01, 10:55

Black

Шулай итеп, 1990 йылдың 11 октябрендә дәүләт суверенитетын иғлан иткәс яһаған тәүге аҙымдары менән үк беҙҙең ғәйәт ҙур тәбиғи ресурстары, ҡеүәтле иҡтисади потенциалы булған республикабыҙ үҙен тышҡы иҡтисади бәйләнештәрен уңышлы үҫтерә алырлыҡ иҡтисади һәм сәйәси тотороҡло төбәк булараҡ танытты.

— Уңай инвестицион шарттар формалаштырыуҙы республикабыҙҙың тышҡы иҡтисади бәйләнештәрен нығытыу йүнәлешенән айырып ҡарау мөмкин түгел, — ти Башҡортостандың Премьер-министры урынбаҫары, тышҡы бәйләнештәр һәм сауҙа министры Рәфил Ғарифуллин. — Бөгөн беҙ донъяның туҡһандан артыҡ иле менән әүҙем сауҙа-иҡтисади мөнәсәбәттәр булдырҙыҡ. Европа, гәрәп илдәре, АҠШ, Һиндостан, Төркиә, Япония, Ҡытай менән ныҡлы элемтәләребеҙ бар...

Республиканың тышҡы иҡтисади эшмәкәрлегенең иң мөһим йүнәлештәренең береһе — сит ил компаниялары һәм банктары менән инвестициялар буйынса хеҙмәттәшлекте үҫтереү һәм нығытыу.

Инвестициялар һалыуҙың өҫтөнлөклө юлы — республика территорияһында сит ил капиталы ҡатнашлығындағы предприятиелар булдырыу. Бөгөнгә беҙҙә шундай 33 предприятие теркәлгән, уларҙың ун туғыҙы — уртаҡ, ун дүрте иһә 100 проценты менән сит ил капиталында ойошторолған. Телефон станциялары етештереүсе «БЭТО-Хуавей» Башҡортостан-Ҡытай предприятиеһы, Голландияның һыраалкоголһеҙ эсемлектәр етештереүсе «Амстар» уңышлы эшләй. Башҡортостанда Төркиә, Үзбәкстан, АҠШ, Вьетнам, Украина, Германия, Ҡытай һәм Ҡаҙағстан фирмалары ҡатнашлығында булдырылған уртаҡ предприятиелар, филиалдар һәм вәкиллектәр айырыуса күп.

Республика хөкүмәте ЮНИДО (Сәнәғәт үҫеше буйынса Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы бүлеге), Европа реконструкциялау һәм үҫеш банкы, Халыҡ-ара сәнәғәт банкы һәм башҡа шундай халыҡ-ара һәм финанс ойошмалары менән хеҙмәттәшлекте нығытыуға етди иғтибар бирә.

Мәҫәлән, 1999 йылда Башҡортостан хөкүмәте ЮНИДО менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөнө. Уның маҡсаты — республиканың мөмкинлектәрен өйрәнеү, төп йүнәлештәр буйынса стратегияны билдәләү һәм ЮНИДОның Башҡортостан буйынса махсуслашҡан программаһын тормошҡа ашырыу. Атап әйтһәк, бөгөн килеп ЮНИДО эксперттары беҙгә айырыуса ҙур инвестиция проекттарын гәмәлгә ашырыуҙа һәм «Полиэф», Ишембай катализаторҙар заводы, «Өфө» халыҡ-ара аэропорты, Йомағужа һыу һаҡлағысы һәм башҡа шундай предприятиелар һәм объекттар өсөн потенциаль инвесторҙар эҙләүҙә ярҙам итә.

Һәм тағы ла бер мөһим йүнәлеш — сит ил банктары ресурстарын йәлеп итеү. Әйтәйек, бөгөн даны таралған уртаҡ «Башкельме» предприятиеһын булдырыуға Европа реконструкция һәм үҫеш банкы, Испанияның ҡайһы бер банктары ҙур өлөш индерҙе. «Салаваторгсинтез» йәмғиәтендә Саксония (ГФР) кредит линиялары иҫәбенә, «Лурги» немец фирмаһы менән берлектә, этилбензол-стирол производствоһын төҙөүҙе тамамлау ҙа иң әһәмиәтле инвестиция проекттары исемлегенә инә. Күптән түгел Венала Стәрлетамаҡтың «Сода» акционерҙар йәмғиәте нигеҙендә Австрия фирмалары менән берлектә ҡоро төҙөлөш ҡатнашмалары етештереү предприятиеһын ойоштороу тураһындағы килешеү ҙә сит ил инвестицияларын уңышлы йәлеп итеүҙең бер миҫалы.

Әйтергә кәрәк, хәҙер донъя күләмендә барған процестарҙы ла даими күҙ уңында тотоу мөһим. Бына шуға ла республикабыҙ хөкүмәте, капиталдың һуңғы ваҡытта Азия-Тымыҡ океан регионына күсеүен иҫәпкә алып, Көньяҡ-Көнсығыш илдәр менән хеҙмәттәшлекте үҫтереү тураһында ҡарар ҡабул итте. Хәҙер инде, мәҫәлән, Көньяҡ Кореяның «LG» фирмаһы республиканың бер нисә предприятиеһы менән хеҙмәттәшлек итә. 1999 йылдың февралендә Башҡортостан һәм Ляонин провинцияһы араһында сауҙа-иҡтисади һәм фәнни-техник хеҙмәттәшлек тураһында хөкүмәт-ара килешеүгә ҡул ҡуйылғас, һуңғы йылдарҙа Ҡытай Халыҡ Республикаһы менән дә мөнәсәбәттәр әүҙемләште. Ҡытай эшҡыуарҙарының Башҡортостан баҙарын үҙләштереүҙә күрһәткән етеҙлеге гәжәпләндерә. Бөгөн инде утыҙҙан артыҡ берлектәге һәм тулыһынса сит ил капиталына булдырылған предприятиелар барлыҡҡа килде, төрлө технологик йыһаздар килә, сауҙа үҫә.

Предприятие етәкселәре һәм эшҡыуарҙарҙың Башҡортостан ерендә һәм Ҡытайҙа осрашып һөйләшеүҙәре



09-2001.p65 50 28.08.01, 10:55
Black

һөҙөмтәһендә түбәндәге килешеүҙәргә ҡул ҡуйылды:

— «Дәүләкән авторемонт заводы» муниципаль предприятиеһы нигеҙендә мини тракторҙар етештереүсе берлектәге предприятие булдырыу тураһында;

— «Өфө фанер-плита комбинаты» акционерҙар йәмғиәтендә уртаса тығыҙлыҡтағы плиталарҙы (МДФ) берлектә етештереү тураһында;

— «Геофизика» йәмғиәтендә етештерелгән аппаратураны һәм скважиналарҙы цементлауҙың сифатын контролдә тотоу технологияһын Ҡытайға һатыу тураһында;

— 2003 йылға ҡәҙәр ужым арышы һәм соя орлоҡтары сорттарын фәнни һынауҙарҙы алмашыу тураһында һ.б.

Быйыл 10-12 апрелдә БР Премьер-министры Р.И.Байдәүләтов етәкселегендәге рәсми делегация тағы ла ҠХР-ҙың Ляонин провинцияһына барҙы һәм оҙаҡ йылдарға иҫәпләнгән үҙ-ара файҙалы хеҙмәттәшлекте киңәйтеү мәсьәләләрен ҡараны.

Тағы шуныһы мөһим, һуңғы йылдарҙа етештерелгән продукцияны, ғөмүмән, республиканың иҡтисади потенциалын күрһәтеү маҡсатында Башҡортостан вәкилдәре илдә һәм сит илдәрҙә үткәрелгән конференция һәм күргәҙмәләрҙә ҡатнаша һәм үҙебеҙҙә шундай халыҡ-ара форумдар үткәреү практикаһын йәйелдерә. Әйтәйек, былтыр республиканы халыҡ-ара дәрәжәлә күрһәтеү һәм инвестиция хеҙмәттәшлеген камиллаштырыу йәһәтенән Башҡортостандың Германияла, Ганноверҙа үткән Бөтә донъя «ЭКСПО—2000» күргәҙмәһендә ҡатнашыуы ҙур ваҡиға булды. Уның ҡыҫалаларында «Башҡортостан — һеҙҙең партнер» күргәҙмәһендә республика менән танышыу, Башҡортостан фәне һәм мәҙәниәте көндәре, Европаның күп илдәре вәкилдәре һәм Германияның 60-тан ашыу фирмаһы һәм компаниялары ҡатнашлығында бизнес-осрашыу үтте. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: бындай айырым саралар ойоштороу хоҡуғы, Башҡортостандан тыш, Мәскәүгә, Санкт-Петербургҡа һәм Татарстанға ғына бирелгән ине.

Республика хөкүмәте ниндәй төр инвестицияларҙы айырыуса әһәмиәтле тип һанай? Барыһынан да элек, тәбиғи байлыҡтарыбыҙҙы үҙләштереүгә, производствоны яңыртыуға (айырыуса нефть химияһы комплексында һәм конверсия предприятиеларында), төҙөлөш оҙаҡҡа һуҙылған объекттарҙы тамамлауға, экология сараларына, ауыл хужалығына алдынғы технологиялар индереүгә, социаль инфраструктураны үҫтереүгә йүнәлтелгән инвестицияларға өҫтөнлөк бирә.

Бөгөнгө шарттарҙа беҙҙә сит ил инвесторҙарына ҡамасаулаған биш мәсьәләне айырым күрһәтергә була:

— һалым системаһының камил булмауы;

— милексе хоҡуҡтарының тейешле дәрәжәлә яҡланылмауы;

— банктар селтәренең һүлпән үҫеш алыуы;

— лизинг финанстарын мөмкин тиклем файҙаланмау;

— экологик тотороҡһоҙлоҡ.

Тағы ла бер мөһим нәмә бар: күпселек инвесторҙар беренсе сиратта Рәсәй хөкүмәте гарантияларын талап итә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, федераль гарантиялы инвестиция ағымдарының төп өлөшө Башҡортостанды (шул иҫәптән Татарстан һәм Яҡут-Саха республикаларын) урап үтә. Бында, бер яҡтан, сәйәси йоғонто һиҙелһә, икенсе яҡтан, объектив сәбәптәр йоғонтоһо ла һиҙелә. Сөнки инвестор иң элек Мәскәүгә килеп төшә, ундағы инфраструктураны (аэропорт, юлдар, банктар, элемтә, сағымдар һ.б.) төбәктәге менән сағыштыра һәм... үҙәктә туҡтала.

Килеп тыуған хәлде яҡшыртыу маҡсатында яҡын киләсәктә түбәндәге сараларҙы күреү мөһим:

— һалым системаһын һәм сит ил инвестицияларын йәлеп итеүҙе дәртләндереүсе норматив-хоҡуҡи базаны камиллаштырыу һәм тотороҡландырыу;

— бай донъя тәжрибәһенә таянып, сит ил инвестицияларын гарантиялау, яҡлау һәм страховкалауҙың заманса системаһын эшләү һәм булдырыу, залог операцияларын үҫтереү;

— халыҡ-ара лизингты үҫтереү өсөн кәрәкле шарттар булдырыу;

— хәбәрҙәрлек һәм консультация тәьмин итеү системаһын үҫтереү.

Һәм тағы бер мөһим нәмә — предприятиеларҙың тулы үтә күренмәлелеге, асыҡлыҡ һәм партнерҙар араһында ышаныс кәрәк. Нәҡ бына ошо шарттар предприятиелар һәм инвесторҙар өсөн үҙ-ара файҙалы хеҙмәттәшлекте үҫтереүгә ышаныслы дәртләндереү сараһы буласаҡ. Ғөмүмән, республикала тышҡы инвестицияларҙы йәлеп итеүҙең потенциаль мөмкинлектәре ғәжәп киң һәм уларҙы әүҙем рәүештә һәм аҡыл менән файҙаланырға ғына кәрәк.



09-2001.p65 51 28.08.01, 10:55
Black